## Аҡыл кеүәһен тикшереү өсөн тест

1. Профессор сәғәтте иртәнге туғыҙға ҡуйып, киске һигеҙҙә йоҡларға ята. Ул нисә сәғәт йоҡлай?
2. Әхмәттең 10 һарығы булған. Туғыҙ һарығынан башҡа барыһы ла үлеп бөткән. Уның нисә һарығы ҡалған?
3. Атаһы менән улы аварияға эләккән. Атаһы үлгән, малай дауаханаға оҙатылған. «Эй, Аллам! Был бит минең улым!» - тигән хирург. Былай булыуы мөмкинме?
4. Тәнгә ҡарауылсы көндөҙ вафат булған. Уға пенсия тейешме?
5. Археологтар беҙҙең эраға тиклем 25-се йылға ҡараған ҡиммәтле тәңкә тапҡан. Былай булыуы мөмкинме?
6. Ғәҙәттә, ай 30 йә 31 көн менән тамамлана. Ниндәй айҙа 28-се көн бар?
7. Һеҙ «Париж – Мәскәү - Токио» рейсын башҡарыусы «Ту-154» самолеты пилоты. Рейстар аҙнаһына нисә тапҡыр була? Пилотҡа нисә йәш?
8. Берҙән алып йөҙгә тиклем һандар рәтендә нисә ун бар?
9. Алты шәм янып ултыра. Уларҙың дүртәүһе һүнә. Нисә шәм ҡала?
10. Ике килограммлыҡ йөктөң ауырлығы бер килограмға һәм ярты кирбескә торошло. Кирбес күпме тарта?
11. Ҡулдарҙа ун бармаҡ. Ә ун ҡулда нисә бармаҡ?
12. Ир кеше үҙенең тол ҡатынының һеңлеһенә өйләнә аламы?
13. Таяҡты 12 өлөшкә бысырға кәрәк. Нисә тапҡыр бысыу талап ителә?
14. Ике поезд, Мәскәүҙән – Санкт-Петербургҡа һәм Санкт-Петербургтан – Мәскәүгә, бер-беренһенә ҡаршы юлға сыҡҡан. Икенсеһенең тиҙлеге тәүгеһенекенә ҡарағанда ике тапҡырға юғарыраҡ. Осрашҡан ваҡытта уларҙың ҡайһыһы Мәскәүҙән алыҫыраҡ булыр?
15. Табип ауырыуға ярты сәғәт арауыҡ менән өс укол ҡаҙай. Күпме ваҡытта уколдар эшләнеп бөтәсәк?
16. Ир кеше: «Был минең балам, ләкин ул минең улым түгел», - тип аңлата. Былай булыуы мөмкинме?
17. Австралияла 7 ноябрь бармы?
18. Ҡараңғы бүлмәлә өҫтәлдә шәм һәм кәрәсин лампаһы тора. Иң тәүҙә нимә тоҡандырырһығыҙ?

Яуаптар:

1. Бер сәғәт
2. Туғыҙ һарыҡ
3. Мөмкин, әгәр хирург уның әсәһе булһа
4. Үлгән кешегә пенсия түләнмәй
5. Мөмкин түгел, сөнки беҙҙең эра күпкә һуңғараҡ барлыҡҡа килгән
6. Һәр бер айҙа
7. Һеҙгә нисә йәш, уға ла шунса
8. Берәү
9. Дүрт шәм ҡала, уларҙың икеһе янып бөтә
10. Ике килограмм
11. Илле
12. Мөмкин түгел, сөнки өйләнә торған кеше тере түгел
13. Ун бер
14. Бер үк алыҫлыҡта
15. Бер сәғәттә
16. Эйе, ул уның ҡыҙы
17. Бар
18. Шырпы

Һөҙөмтәне дөрөҫ булмаған яуаптар һанынан сығып иҫәпләргә мөмкин

0 - 1 – гений

2 – 4 – интеллектуал

5 – 7 – яҡшы фекерләй белә

8 – 10 – ярайһы интеллектуаль кеше

11 – 12 – фекерләү ҡеүәһен арттырырға кәрәк

13 – 14 – фекерләү кимәле түбән

15 – 16 - фекерләү кимәле үтә түбән

17 – 18 - фекерләү кимәле саманан тыш түбән

Resource: www.ye02.ru